◆ *Үҙебеҙҙекеләрҙе ташламайбыҙ!*

# ЯУГИРҘӘР ӨСӨН “НИВА” ҺӘМ МУНСА

***Ошо көндәрҙә махсус операцияла катнашыусы якташтарға кәрәк-ярак йыйылды. Йәштәр йорто янында гуманитар конвойҙы оҙатыусылар алдында район хакимиәте башлығы Илдар Нафиков сығыш яһаны.***



– Яугирҙәр үҙҙәре һораған кәрәк-яракты кыҫка ғына вакытта күмәк көс менән теүәлләп, бөгөн юлға сығабыҙ. Ярҙам кулы һуҙған, изге һәм мөһим эштән ситтә калмаған райондаштарға, предприятие-ойошма етәкселәренә ҙур рәхмәт һүҙҙәрен еткергем килә, – тине Илдар Таһир улы. – Ир-егеттәргә бар яктан терәк булған ғаиләләренә лә рәхмәт, һеҙҙең күстәнәс-сәләмдәрегеҙ уларҙың күңелдәрен йылытыр. Махсус операцияла катнашкан һалдаттар беҙҙең өсөн якын кешеләр, уларға беҙҙең иғтибар һәм хәстәрлек кәрәк. Был ярҙамды алып барып тапшырып кайтһак, киләһе гумконвойҙы әҙерләй башлаясакбыҙ.

Кужандан хеҙмәт ветераны Клара Абдуллина ла изге теләктәр еткерҙе, ил өсөн ауыр вакытта берҙәм һәм дөргөн булырға сакырҙы.

Хәмиттән Динир Баһаует-динов яугирҙәр өсөн күсмә мунса эшләгән. «Абзелилилспецкомобслуживание» МУП-ы коллективы башланғысы менән “Нива” машинаһы һатып алынған. Был эшкә «Якты-Күл» шифаханаһы, «Березки» ял йорто ла үҙ өлөшөн индергән. Машинаны хәрби операцияла катнашкан улына атаһы үҙе тапшыра, ул гумконвойҙы оҙатыусылар менән барасак.




Илдар Нафиков етәкләгән делегацияла Аскар һәм Ташбулат ауыл биләмәләре башлыктары Тәлғәт Әғзәмов һәм Динис Таһиров та бар. Тыуған яктарына ялға кайткан яугир ҙә улар менән бергә хеҙмәт урынына юлланды.

Дин әһеле Мөжәүер Фәйезов алыҫ сәфәргә сығыусыларға юл фатихаһын биреп, доға укығас, исемле посылкалар, аҙык-түлек, йылы кейемдәр, итектәр, башка кәрәк-ярак тейәлгән машиналар куҙғалды. Имен барып етеп, күстәнәстәрҙе яугирҙәргә тапшырып, уларҙы кыуандырып кайттылар!

**Динара САФИУЛЛИНА.**